*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# ӘЙ БУЙЫ, ӘЙ ҺЫУЫ...

«Әйлеләр, мырҙалар, тырнаҡлылар» тигән риүәйәттә ырыу-ҡәбиләнең сығышы, ата-бабалары тураһында шулай һөйләнелә:

— Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Һыр йылғаһы буйындағы Ҡайып тигән урында йәшәгән. Бер бик бай бабабыҙҙың күк аты менән бейәһе, Fәҙелбаныу исемле сибәр ҡыҙы юғала бер заман. Уларҙы өс егет эҙләргә сыҡҡан. Эҙ юллап килә торғас, Торғаяҡтан алыҫ булмаған бер урында ҡыҙҙы табалар. Йылҡының эҙе Уралға табан киткән була. Яйыҡты үтеп, Әй буйына килеп сығалар эҙ юллап. Тәбиғәттең матурлығына егеттәрҙең иҫе китә: ҡуйы урмандар, мул һыулы йылғалар, үҙәндәр... Был тирәлә кешеләр булмаған. Егеттәр бер йылғаны Әй, икенсеһен — Үҙән, улар араһындағы тауҙы Ҡөҙрәттау тип атаған. Бер бәләкәйерәк йылға буйында улар үҙҙәренең аттарын да табып ала. Һырдарья буйына ҡайтҡас, егеттәр үҙҙәре күргән хозур ерҙәр тураһында һөкланып һөйләй. Шунан Һырдарья башҡорттары Уралға күсеп килгән. Күсеп килеүселәр араһында Мырҙабәк, Имса, Тумса исемле арҙаҡлы кешеләр була. Мырҙабәк — мырҙаларҙың, Имса — тырнаҡлыларҙың, уның энеһе Тумса — әйлеләрҙең ата-бабаһы.

Әйле ҡәбиләһенең ырыуҙары: әй (әйҙе), яланәйҙе, һарт-әйҙе, тырнаҡлы, түбәләҫ, төрөкмән, мырҙалар, ҡаратаулы, дыуан; тамғаларының атамаһы: ай-тамға, дөйә муйын, һигеҙле; ҡошо: шонҡар (аҡҡош, бөркөт, торна); ағасы: тирәк (муйыл); ораны: һандал (салауат).

Ҡыйғы районының Иҙрис (Рауил, Ҡыйғы башы), Әбдрәзаҡ, Ҡолбаҡ (Сатай, Сатый), Ҡурғаш, Йонос (Ҡомой, Әпкәғыр) ауылдары — әйле ҡәбиләһе, әйле ырыуы ауылдары. Ибрай (Соңкә, Соңҡа), Иҫке Мөхәмәт (Соңҡа), Яңы Мөхәмәт (Тораморон), Сағыр (Сутыш), Яуын (Сыуаш) халҡы әйле ҡәбиләһенән, тырнаҡлы ырыуынан. Абзай (Уртауыл, Мәсетле) — дыуан, Алағуҙ (Ҡабыл), Мәсәк, Йосоп, Аҫылғужа, Сирбай ауылдарының ҡәбиләһе — дыуан, ырыуы — аҡбай...

Әйле башҡорттары ғәжәп йәмле Әй буйҡайҙарына бағып, эскәйҙәре тулы моңһағыш менән йырлаған, ҡурайын уйнаған, шулай күңелен йыуатҡан, хәсрәтле яҙмышҡа баш эймәгән:

Иртә генә томан, кис тә томан,
Әй һыуы — ағын һыу ҙа,
Был томандар ниңә лә асылмай,
Әй һыуы — ағын һыу.
Эскенәйем тулы ҡайғы-хәсрәт,
Әй һыуы — ағын һыу ҙа,
Бер йырламай йөрәгем баҫылмай,
Әй һыуы — ағын һыу...

Әй йылғаһы Көньяҡ Уралдың иң матур йылғаларының береһе. Ул Уралтау һәм Әүәләк һырттары араһындағы яҫы таулыҡ буйындағы Мүк еләге һаҙынан — Һары һаҙҙан баш ала. «Ҡасҡындар» ҡобайырында әйтелеүенсә:

Иҙел башы — Ирәмәл тау,
Яйыҡ башы — Ялпан тау,
Әйҙең башы — Һары һаҙ,
Уйҙың башы — Ҡара таш,
Мейәс башы — Күмәс тау...

Әй һыуҙары Силәбе биләмәләренән, Башҡортостандың Салауат, Ҡыйғы, Дыуан, Мәсетле төйәктәренән ағып үтеп, һул тарафтан Ҡариҙелгә барып ҡушыла. Ҙур ҡушылдыҡтары — Ҡуҫа, Ҙур Арша, Ҡыйғы, Оло Ыҡ, Ыҡ (уңдан), Оло Һатҡы (һулдан). Әйҙең оҙонлоғо — 549 километр, бассейнының майҙаны — 15 мең квадрат километр. Юғары яғы — Көньяҡ Уралдың тау һәм тау алды ерҙәре, тотошлай ҡарағайҙар, шыршылар һәм япраҡлы урмандар менән ҡапланған. Салауат районы Ылаҡлы тирәһенән түбән яғы Йүрүҙән — Әй тигеҙлегендә һәм Өфө ялпы таулығында ята, бында урманлы-дала күҙаллана. Хуш еҫле болондарында сәскәләре күҙҙең яуын ала, һабан турғайҙары, һандуғастары өҙҙөрөп һайрай. Йәмле Әйҙең буйҙары! Халыҡ йыры «Әй буйы»нда йырланыуынса:

Әй буйҙары аҡ таллыҡ,
Талда һайрай һандуғас.
Һандуғасҡа ҡушылып йырлай
Әй ҡыҙҙары, яҙ булғас.
Әй буйы, Әй буйы.
Тормош ҡайнай, тормош гөрләй
Әй һыуы буйҙарында.
Мул тормош данлап йырлана
Әй буйы йырҙарында.
Әй буйы, Әй буйы.
Әй буйҙары ағаслыҡ,
Йөрөй-йөрөй аҙаштыҡ.

Аҙашманыҡ, аҙашманыҡ,
Яңы ерҙән юл астыҡ.
Əй буйы, Əй буйы.
Əй йылғаһы ағып китә
Болондарға, ҡырҙарға,
Йәшәү булып йөрәктәргә
Һәм көй булып йырҙарға.
Əй буйы, Əй буйы.

Тәбиғәт менән бер йән кеүек ғүмер иткән, уның йәме менән хозурланған ҡанбабаларыбыҙ йөрәктәргә йәшәү һәм йырҙарға көй булып ағып ятҡан йылғаны «Ай кеүек матур» тип, Айға тиңләгәндәрҙер. Төрки халыҡтарында йәмлелекте Ай менән сағыштырыу ғәйәт киң таралған. Әкиәттәрҙә: «Ҡыҙ шул тиклем матур, ти, бер бите ай, бер бите ҡояш кеүек, ти!» — тип һөйләнә. Йырҙарҙа: «Бер битең ай һинең, бер битең нурлы көн һинең», — тип йырлана.

Ҡыҙҙарға — Айһылыу, малайҙарға Айбулат тип исем ҡушҡандар һәм әле лә ихлас ҡушалар. Айһылыу исеме Ай һылыуы, Ай матуры булып аңлашыла. Ҡайһы бер төрки телдәрендә (алтай, уйғыр) «ай» һүҙе күсмә мәғәнәлә лә матурҡай тигәнде аңлата.

Башҡорт һүҙе «ай» иһә — күк есеме атамаһы. Телселәр Əй йылғаһының исеменең килеп сығышын XVIII быуаттан уҡ Айға бәйләй, «Светлая», «Светлая, как луна», «Луна» тип төшөндөрә. Филология фәндәре докторы А.К.Матвеев: «Метафора могла возникнуть и другим путем: светлую воду реки сравнили с блеском луны. Отсюда толкование — «Светлая, как луна» — тип белдерә.

Башҡорт ғалимдары Э.Ф.Ишбирҙин, Р.Ғ.Кузеев түбәндәге версияны ла тәҡдим итәләр: «Йылға үҙ исемен Урта Азиянан, йәиһә Урал аръяғының көньяҡ-көнсығышынан күсеп килеп, йылға үҙәнендә урынлашҡан башҡорттарҙың Əйле ҡәбиләһенән алған. Шуныһы ла иғтибарға лайыҡ: Əйле ҡәбиләһенең тамғаһы, йәғни милек билдәмәһе ярым ай рәүешендә һәм ай-тамға тип атала».

А.К.Матвеевтың ҡарашынса, ғөмүмән, Əй йылғаһының атамаһы метафорик характеристика булһынмы, йәиһә ҡәбилә исеменән күсһенме — башҡорт һүҙе «ай»ҙан килеп сыҡҡан. Күрәһең, башта ай башҡорт ырыуҙарының береһенең тотемы булғандыр, дини табыныу есеме булып хеҙмәт иткәндер. Ике версия ла ысынбарлыҡҡа оҡшай. Урындағы халыҡ «ай» һүҙе менән ҡәбилә атамаһының йылғаға күсерелеү бәйләнешен яҡшы тойған. Бынан инде артабан йылғаның атамаһы икенсенән тыуыу мөмкинлеге аңлашыла: Əй ҡәбиләһе — «Ай» → Əй йылғаһы — «Ай» → Ай һымаҡ матур (яҡты). Хәҙерге ваҡытта Əй гидронимында *а* урынына *ә* әйтелә. Башҡорт теленең әй һөйләшендә әҙәби *а* урынына *ә* өнө менән һүҙҙәрҙең йомшаҡ варианты ҡулланыла: атай-әтәй, аҙ-әҙ, Ай-Əй...

